**VIII синыфта география дәресе .**

**(8 кл, «География: Природа России.Э.М. Раковская, стр.119-125, п.20)**

**Тема.** Күлдәр,һаҙлыҡтар,һыуһаҡлағыстар, боҙлоҡтар, күп йыллыҡ туңлыҡ.

**Маҡсат.** 1.Уҡыусыларҙы эске һыуҙарҙың башҡа төрҙәре менән таныштырыу.

2.Уларҙың урынлашыу үҙсәнлектәрен,тәбиғәтен, төрҙәрен аңлатыу.

3.Тәбиғәттә һәм кеше тормошонда уларҙың әһәмиәте, уларҙы һаҡлау.

**Йыһазлау.** Рәсәйҙең физик картаһы,һүрәттәр.

**Дәрес барышы.**

**I.Ойоштороу моменты.**

**-Һаумыһығыҙ, уҡыусылар.**

**Дәрестә актив ҡатнашып, яҡшы билдәләр алыу өсөн әҙерһегеҙме?**

**II.Өйгә эште тикшереү.**

Йылғалар, үҙсәнлектәре.

Тест.

1.Рәсәй йылғалары түбәндәге бассейндарға ҡарай
а) Төньяҡ Боҙло океан, Атлантик океан
б) Төньяҡ Боҙло океан, Атлантик океан, Тымыҡ океан
в) Төньяҡ Боҙло океан, Атлантик океан,Тымыҡ океан, Каспий диңгеҙе.
2.Яҙ ташыусы йылғалар
а) Волга, Амур
б) Волга, Амур, Лена
в) Волга, Дон, Терек.
3.Түбәндәге һөйләмдәрҙе тамамларға
а) Катунь һәм Бия йылғалары ҡушылып … йылғаһы барлыҡҡа килә.
б) Шилка һәм Аргунь йылғалары ҡушылып… барлыҡҡа килә.
в) Ҙур һәм Бәләкәй Енисей йылғалары ҡушылып … йылғаһы барлыҡҡа килә.
4.Дөрөҫ һөйләмде һайлап алырға
а) Волга Онега күленән башлана
б) Енисей – тау йылғаһы
в) Дон- яҙ ташыусы йылға
г) Иң күп ҡаты ағым сығарыусы йылға-Терек.
д) Иң күп һыулы йылға- Енисей.
е) Иң күп гидроэлектростанциялар төҙөлгән йылға- Волга.

**III.Яңы тема**

1.Күлдәр һәм һыуһаҡлағыстар.

-Нимә ул күл?

-Һез ниндәй күлдәрҙе беләһегеҙ? Иң тәрән күл нисек атала?

Барлыҡҡа килеүҙәре буйынса күлдәр бүленә

- тектоник – Байкал
- боҙлоҡ - тектоник - Ладога,Онега,Имандра
- морена күлдәр – Селигер
- вулканик – Камчатка, Курил утрауҙары
- термокарст –Якутияла
- карст һәм ҡылы күлдәр
- быума күлдәр – Рица, Кавказ тауы
- боҙлоҡ күлдәр – Телецк, Алтай тауы.

Күлдәр- гидросфераның мөһим өлөшө. Беҙҙең илдә 2,5 млн.-ға яҡын күл иҫәпләнә.

2.Күлдәрҙең үҙсәнлектәре

- ағыр һәм тоҡон күлдәр
- сөсө һәм тоҙло һыулы күлдәр.

Карта буйынса эш.

-Иң күп күлдәр ҡайҙа тупланған?

-Тоҙло күлдәр картала ниндәй төҫ менән күрһәтелә?

3.Һыуһаҡлағыстар

-Күл һәм һыуһаҡлағыс нимәһе менән оҡшаш?

Һыуһаҡлағыстар төҙөлгән йылғалар:

- Волга, Ангара, Енисей.

Ҙур һыуһаҡлағыстар:

- Куйбышев, Братск, Рыбинск.
- Ниндәй йылғала иң күп һыуһаҡлағыстар төҙөлгән?

4.Һаҙлыҡтар.

Үҙ- алға уҡыу, карта буйынса табыу.

-Ҡайҙа һаҙлыҡтар күп? Ни өсөн?

-Һаҙлыҡтарҙың экологик әһәмиәте нимәлә?

5.Күп йыллыҡ туңлыҡ.

- 95% - утрауҙарҙа һәм Арктикала япма боҙ, 55 мең кв. км.һәм 15 мең кв. км.
- тау боҙлоҡтары:
- Кавказ
- Алтай

-Камчатка

-Урал

-Көнсығыш Саян.

Тау боҙлоғоноң дөйөм майҙаны- 200кв км.

6.Ер аҫты һыуҙары

- артезиан
- сөсө

- минераль
- термаль

Ер аҫты һыуҙары юғары сифатлы таҙа һыуҙар сығанағы. Беҙҙең ил ер аҫты һыуҙарына бай, әммә уны һаҡлап тотонорға кәрәк, бысратыуға юл ҡуйырға ярамай.

7.Күп йыллыҡ туңлыҡ.

Карта буйынса сиктәрен билдәләү һәм барлыҡҡа килеү сәбәбен аңлатыу.

**IV.Нығытыу**

Карта һәм дәреслек буйынса эш.

Дәреслектә бирелгән эске һыу төрҙәрен контур картаға билдәләү һәм һорауҙарға яуап биреү.

**V. Йомғаҡлау**

-Беҙ нindәй эске һыу төрҙәре менән таныштыҡ?

-Уларҙың әһәмиәте нindәй?

-Ер өҫтө һыуҙарын һаҡлау нимә ул?

**VI. Өйгә эш**

Уҡырға һәм Ладога күлен тасуирларға.

